## 14–се практик эш

**Темаһы:** Специальностең ауыл хужалығындағы роле. Роль специальности в сельском хозяйстве.

**Башҡарыласаҡ эш төрҙәре:** сифаттарҙы ҡулланыу буйынса практик биремдәр башҡарыу.

**Наименование работы:** выполнение практических заданий на применение имен прилагательных.

**Маҡсат:** студенттарҙың буласаҡ һөнәре, специальносе, ауыл хужалығы тураһында әңгәмәләшеү, сифаттарҙы ҡулланыу буйынса күнекмәләр булдырыу.

**Ваҡыт нормаһы:** 2 сәғәт.

**Әҙәбиәт:** 1.Усманова М.Ғ., Солтанғолова З.З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған һөнәри белем биргән ойошмалар өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2015.

**Техник хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре:**

1.Эште инструкцион – технологик карта буйынса башҡарырға.
2.Эш урынын тәртиптә тоторға. 3.Кеҫә телефондарын һүндерергә.

**Инеш инструктаж**

**1.Һүҙлек:**

| | | |
|---|---|---|
| аҡыллы – умный | аҡылһыҙ – глупый | һыуыҡ – холодный |
| йылы – теплый | эҫе – жаркий | һалҡын – холодный |
| еүеш – мокрый | ҡоро – сухой | таҙа – чистый |
| бысраҡ – грязный | ҙур – большой | бәләкәй – маленький |
| яҡшы – хороший | насар – плохой | һәйбәт – хороший |
| ҡарт – старый | йәш – молодой | тура – прямой |
| кәкре – кривой | еңел – легкий | яҡын – близкий |
| оҙон – длинный | ҡыҫҡа – короткий | уҫал – злой |
| яңы – новый | иҫке – старый | яҡты - светлый |

тырыш – старательный егәрле, уңған, эшсән - трудолюбивый

**2. Сифат – имя прилагательное –** предметтың билдәһен белдерә һәм **ниндәй?** һорауына яуап бирә. Мәҫәлән, **ҡыҙыл (ниндәй?)** туп.

**Эш башҡарыуҙың йөкмәткеһе һәм эҙмә – эҙлелеге:**

**1-се бирем.** Тексты тәржемә итегеҙ. Текстан сифаттарҙы табып, күсереп алығыҙ (Переведите текст. Найдите и выпишите из текста прилагательные).

Ауыл хужалығына хеҙмәт итә.

Хәҙер ауыл тормошонда һәм ҡала тормошонда ветеринар бик ҙур роль уйнай. Ветеринарҙан башҡа тормошто күҙ алдына килтереп булмай.

Ауылда мал табибы иртә менән эшен башлай: ул колхозда йәки фермер хужалығында малдарҙың һаулығын тикшерә, уларҙы дөрөҫ, нормаға ярашлы туҡландырыу ҡағиҙәләре менән таныштыра, рационын билдәләй.

Ҡалала ла ветеринарҙарға эш етерлек. Улар төрлө клиникаларҙа, ҡош – ҡорт фабрикаларында, эт һәм бесәйҙәр өсөн асылған приюттарҙа эшләй. Яҡшы белгестәр эштәрендә үҙҙәренең теоретик белемдәренә һәм практик тәжрибәләренә таяна. Хайуандарҙың һаулығы тулыһынса уларға бәйләнгән.

**2 -се бирем.** Бирелгән төҫ атамаларын башҡортсаға әйләндерегеҙ (Переведите слова, обозначающие цвета, на башкирский язык):
черный, белый, зеленый, красный, желтый, голубой, синий, коричневый, серый, розовый, фиолетовый, оранжевый.

**3-сө бирем.** Һөйләмдәрҙе башҡорт теленә тәржемә итегеҙ, сифаттарҙы табығыҙ (переведите предложения на башкирский язык, найдите прилагательные): В нашем селе живут и работают очень старательные люди. Они работают в колхозе. Доярки и животноводы работают на ферме. Трудолюбивые хлеборобы выращивают хлеб. Ветеринары лечат больных животных. Механизаторы ремонтируют технику. Все они хорошие специалисты.

**4-се бирем. Вариантлап эшләү.** Бирелгән һүҙҙәрҙән сифаттар барлыҡҡа килтерегеҙ (от данных слов образуйте имена прилагательные **по образцу : аҡыл** – ум – аҡыл**лы** – умный, аҡыл**һыҙ** – глупый.

1. **се вариант:** баш, һөт, томан , шәкәр, тоҙ
2. **се вариант:** ямғыр, бал, болот, тәм, ҡар

**5-се бирем.** Ниндәй ул ауыл кешеһе? (Каков он, человек села? Опишите его, используя прилагательные).

**Биремдәрҙе башҡарғандан һуң студент белергә һәм эшләй һәм ҡуллана белергә тейеш:**

1.Һөнәр, ауыл хужалығы тураһында, уларҙың әһәмиәтен билдәләргә, сифаттарҙы, уларҙың телмәрҙәге урынын билдәләргә,
2.Һөнәр, ауыл хужалығы тураһында һөйләмдәр төҙөү, сифаттарҙы ҡулланыу, телмәрҙәге урынын билдәләү буйынса күнекмәләр булдырырға.

**Контроль һорауҙар һәм биремдәр:**

1.Һорауҙарға яуаптар яҙығыҙ: Был ниндәй кеше? Был ниндәй юл? Был ниндәй белгес? Был ниндәй мал? Был ниндәй студент? Был ниндәй һөнәр?
2.Тәржемә итегеҙ: высокий, низкий, узкий, широкий, темный, светлый.

**Студенттарҙың үҙаллы эше өсөн биремдәр:**

Дәреслектән 193 - сө биттәр, Л.2. 86- сы бит. Диалог төҙөргә.

Уҡытыусы______________ Мөхөтдинова Ф.Р.